Осkон 15 октябрь, 2019 йыл

*Төҙөкләндереү*

# Аҡмулла иҫтәлегенә

9 октябрь көнө район үҙәк китапханаһы янында башҡорт халҡының күренекле шәхесе, мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла иҫтәлегенә скульптураны асыу тантанаһы үтте. Скульптураны эшләтеү инициативаһы район ветерандар советы рәйесе Ансар Төлкөбаевтыҡы булһа, скульптор Сергей Елкин уны һынландырған. А. Ғ. Төлкөбаев ҡунаҡтарҙы «Асыҡ китап» скульптураһын булдырыу идеяһының барлыҡҡа килеүе менән таныштырҙы. Район матбуғаты ветераны, Рәсәй һәм Башҡортостан журналистар союзы ағзаһы Самат Фәйзуллин, хеҙмәт ветераны Салауат Әминев **(һүрәттә)**, мәғариф бүлеге методисы Зөлфиә Нигмәтова, Хужахмәт-Йәсәүи Бикмәтовтың ейәне Мират Бикмәтов, «Йәйғор» яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе Иҙрис Ноғоманов туған тел буйынса фекерҙәрен белдерҙе. Һәйкәлде асыу хоҡуғы район ветерандары советы рәйесе Ансар Төлкөбаевҡа һәм Самат Фәйзуллинға бирелде. Йыйылған ҡунаҡтар һәйкәл янына сәскәләр һалды һәм иҫтәлеккә фото төштө.



**Регина ИШБУЛДИНА.**